# Студенттарҙың танып-белеү эшмәкәрлеген активлаштырыуҙа мәғлүмәти технологиялар ҡулланыу

*Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы,*
*Туймазы педагогия колледжының башҡорт теле уҡытыусыһы*

Шәхестең уҡыу процесында көслө ихтыяр менән белемгә ынтылыуы уның танып-белеү эшмәкәрлеге активлығын күрһәтә. Белем биреүҙә балаларҙың әүҙемлеген үҫтереү элек-электән педагогика өлкәһендә актуаль мәсьәлә булып һаналған. Бөгөнгө көндә лә һәр уҡытыусы дәрескә әҙерләнгәндә нисек итеп уҡыусыны ҡыҙыҡһындырырға, дәртләндерергә тигән һорау менән төрлө традицион һәм яңы ысулдарға, методтарға мөрәжәғәт итә. Уҡыу-уҡытыуҙың сифатын яҡшыртыуҙа, уҡыусыларҙың танып-белеү эшмәкәрлеген үҫтереүҙә заманса технологияларҙың мөмкинлектәре ҙур. Шуларҙың береһе булып мәғлүмәти технологиялар һанала.

Әлбиттә, тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә уҡытыусыны компьютер алыштыра алмай, сөнки ул – рухты тәрбиәләүсе, йәштәрҙә кешелеклелек, намыҫ кеүек әхләҡи сифаттарҙы үҫтереүсе, телгә, тарихҡа, мәҙәниәткә ылыҡтырыусы, һәм уның төп ҡоралы - тел, халҡыбыҙҙың ынйы-һүҙҙәре. Ә компьютер технологиялары ошо маҡсатҡа ирешеүҙә сара булып тора. Электрон дәреслектәр һәм уҡытыусы тарафынан әҙерләнгән презентацияларҙың текст материалы менән бергә сағыу аудио, видео яҙмалар, һүрәттәр менән аралаштырылыуы, анимациялы эффекттарҙың ҡулланылыуы-бөтәһе лә балаларға теманы үҙләштереүҙә ыңғай йоғонто яһай тәрбиәләй.

Алдынғы уҡытыусылар мәғлүмәти технологияларҙы дәрестең төрлө этаптарында – яңы материалды үҙләштереүҙә, белемде камиллаштырыуҙа, нығытыу һәм йомғаҡлау мәлендә уңышлы ҡулланалар. Тәжрибә күрһәтеүенсә, юғары синыф уҡыусыларының һәм студенттарҙы төрлө өлкәләлә белем донъяһына йәлеп итеүҙә компьютер технологияларын ҡулланып үҙ аллы эштәр – тикшереүҙәр, эҙләнеүҙәр башҡарыу ҙа ҙур йоғонто яһай. Үҙебеҙҙең сығышыбыҙҙа ошо мәсьәләгә нығыраҡ туҡталырға уйланыҡ.

Беҙҙең Туймазы педагогия колледжында студенттар «Информатика», «Мәктәпкәсә тәрбиә биреү», «Башланғыс кластарҙа белем биреү», «Физик тәрбиә биреү» һөнәрҙәрен үҙләштерә. Яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптары буйынса улар мәғлүмәти технологиялар менән

эшләү күнекмәләренә эйә булырға тейештәр. Шулай булғас, башҡорт телендә презентациялар әҙерләү уларға телде өйрәнеүгә лә, буласаҡ һөнәрҙе үҙләштереүгә лә ыңғай йоғонто яһай. Беҙҙеңсә, презентациялар әҙерләү өсөн лексика буйынса, яҙыусыларҙың ижады буйынса темаларҙы һайлау отошлораҡ, сөнки йәштәргә был өлкәлә үҙ аллы белемдәрен арттырыуға, эҙләнеүгә мөмкинлектәр киңерәк.

Мәҫәлән, «Информатика» бүлеге студенттары менән беҙ дәрестә яҙыусылар тормошо һәм ижадын өйрәнеүгә бәйле презентациялар әҙерләнек. Был эште 4 этапҡа бүлдек. Тәүге этапта студенттар үҙ аллы башҡарыу өсөн темалар һайлай, презентацияларға ҡарата талаптар һәм баһалау критерийҙары менән таныша. Артабан тема буйынса өҫтәлмә мәғлүмәт туплай:

- яҙыусы биографияһын тулыраҡ өйрәнә,
- иҫтәлектәр менән таныша, цитаталар яҙып ала, шағирға арналған шиғырҙарҙы йыя,
- китаптарҙан, интернет селтәренән әҙиптең фоторәсемдәрен таба,
- темаға ярашлы әҙиптең шиғырҙарын һайлай,
- теманы асырҙай йырҙар, мәҡәлдәр, көйҙәр эҙләй һ.б.

Бөтә йыйылған материалдар электрон папкаға туплана.

2 этапта презентацияның композицияһын уйлайҙар, сценарий төҙөйҙәр. Слайдтың һанын, унда ҡуйыласаҡ иллюстратив материал, уға комментарий, текст материалдарын һайлайҙар. Был эштәр студенттың ижади һәләттәрен үҫтерә. Презентацияла текстарҙың башҡорт телендә яҙылыуы уларҙың грамоталығын арттыра.

3 этапта Power Point программаһы технологияларына ярашлы, презентация техник яҡтан әҙерләнә: шаблондар, слайдтар макеты, фон, анимация, бер слайдтан икенсе слайдҡа күсеү эффекттары, көй, графика һайлана.

Аҙаҡҡы этапта студенттар презентацияға таянып үҙҙәренең темалары буйынса башҡорт телендә сығыш яһарға әҙерләнә. Ижади отчет дәресендә эштәр менән танышабыҙ, уларҙы баһалау өсөн махсус карточкаларға таянып бергәләп балдар ҡуябыҙ. Был эштәрҙе башҡарыу мәлендә студенттарҙың

башkорт теле буйынса яҙыу, һөйләү күнекмәләре үҫә, әҙәбиәт, сәнғәт, фольклор, тарих кеүек төрлө өлкәлә белемгә эйә була, шулай уk компьютер программалары менән эшләү оҫталығы арта, ижади һәләттәре үҫә. Алда һаналған эштәрҙең күпселек өлөшөн дәрес мәлендә ойоштороу яkшырak, сөнки уkытыусыға студенттарға ярҙам итеүе, йүнәлеш биреүе уңайлырak.

Дәрестән тыш башkарылған эштәр ҙә уkыусыларҙың белемдәрен тәрәнәйтә. Мәҫәлән, "М.Аkмулла" исемле мультимедиялы kулланма төҙөүҙә 6 кеше kатнашты. Бер студент Аkмулланың ижады үҙенсәлектәрен өйрәнде, икенсе студент - биографияһын, кемдер бөгөнгө көндә шәхестең онотолмауы, әҙәбиәттә, сәнғәттә унын исеме һаkланыуы хаkында мәғлүмәт йыйҙы. Компьютер технологияларын яkшы белеүсе мультимедиялы әсбәп әҙерләне. Беҙ төрлө сығынаkтарҙы файҙаландыk. Улар түбәндәгеләр:

- фәнни хеҙмәттәр (Р.Шәкүр, Ғ. Ҡунафин, Ә Вилданов һ.б. эштәре).
- методик хеҙмәттәр («Б.У» журналында сыkkан мәkәләләр, төрлө методик kулланмалар, йыйынтыkтар һ.б.)
- гәзит-журналдарҙа сыkkан мәkәләләр: («Йәшлек», «Тамаша», «Ағиҙел», «Аkмулла төйәге», «Ватандаш» гәзит һәм журналдары).
- сәнғәт әҫәрҙәре (төрлө рәссам картина репродукциялары, скульптура әҫәрҙәре, документаль фильмдар).
- әҙәби әҫәрҙәр (башkорт әҙиптәренең роман, повесть, шиғыр һәм поэмалары).

Һөҙөмтәлә, "М.Аkмулла" исемле электрон мультимедиялы хеҙмәттә дәресте үткәрергә ярҙам итерҙәй әҙип шәхесенә, тормошона һәм ижадына бәйле kыҙыkлы материалдар, презентациялар, дәрес өлгөләре, мәkәләләр, әҙәбиәт исемлеге һәм тағын да күп нәмәләр тәkдим ителде.

Шулай итеп, башkорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙә компьютер технологиялары менән эшләү барышында йәштәрҙең танып белеү эшмәкәрлеге активлаштырыла, ижади һәләттәре үҫә, телебеҙгә, әҙәбиәткә kарата һөйөү, ихтирам тойғоһо тәрбиәләнә, үҙ һөнәренә kарата ижади kараш булдырыла.